**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**Муниципальное казенное учреждение**

**Салаватский районный отдел образования**

**Муниципальное общеобразовательное учреждение**

**средняя общеобразовательная школа с. Алькино**

**муниципального района Салаватский район**

**Республики Башкортостан**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| Руководитель ШМО | Зам директора по УВР | Директор |
| Ямалетдинова Г.Д | Закирова Л.Ф. | Абдуллина Г.А. |
| Протокол №1 от «28» 08 2024 г. | Протокол №1 от «28» 08 2024 г. | Приказ №206 от «28» 08 2024 г. |

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

(ID 6258793)

**учебного предмета Родной (башкирский) язык**

для обучающихся 3 классов

**с. Алькино 2024**

**Аңлатмалы яҙыу**

”Башҡорт теле” уҡыу предметының йөкмәткеһе

1.*Фонетика һәм орфоэпия.* Өндәр һәм хәрефтәр.Өндәрҙең һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға бүленеше.Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар.Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар.Һүҙҙәрҙә тартынҡыларҙың сиратлашыуы(*китап-китабы,ҡалаҡ-ҡалағы*).Һүҙҙәргә фонетик анализ.

2.*Һүҙ составы.* Һүҙ составы (тамыр һәм ялғауҙар). Тамырҙаш һүҙҙәр.Уларҙың тамыры. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар.Һүҙьяһалыш.Ҡушма һүҙҙәр.Ҡушылып яҙылыусы ҡушма һүҙҙәр.Ҡабатлау юлы менән йәки парлап яһалған ҡушма һүҙҙәр.Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.Ҡушма һүҙҙәрҙә ҡалын(ъ) һәм нәҙек (ь)айырыу билдәләренең яҙылышы.Һүҙҙәргә составы буйынса анализ.Һүҙ төҙөлөшө.Һүҙҙең тамыры.Тамыр нигеҙле һүҙҙәр.Һүҙ нигеҙе тураһында төшөнсә.Яһалма һәм ҡушма һүҙҙәр.Ялғауҙар.

3.*Орфография һәм пунктуация.*Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы.Ялғау ҡушылғанда бер иш тартынҡыларҙың килеп сығышы. Тамыр һүҙҙәрҙәге о-ө,ы-е хәрефтәренең ялғау ҡушҡанда ла һаҡланыуы. О-ө,ы-е хәрефтәренең тамыр һүҙҙәрҙә яҙылмау осраҡтары(*тупраҡ,япраҡ*) . Нәҙеклек билдәһенә бөткән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың яҙылышы.

4.*Морфология.* Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре.Ярҙамсы һүҙҙәр.Предмет атамаһы.Һөйләмдә ҡулланыу.Исемдең һорауҙары.Яңғыҙлыҡ исемдәр.Кешенең исем-фамилияһының,хайуан ҡушаматтарының,ер-һыу атамаларының,китап һәм гәзит-журналдарҙың исемдәренең ҙур хәреф менән яҙылышы.

*Билдәне белдергән һүҙҙәр.*Уларҙың исем алдынан килеүе,телмәрҙәге әһәмиәте.

*Хәрәкәтте белдереүсе һүҙҙәр.*Һөйләмдә уларҙы таныу,дөрөҫ һорау ҡуйыу.Был һүҙҙәрҙең һөйләмдә хәбәр ролен үтәүе.

*Ярҙамсы һүҙҙәр.*Ярҙамсы һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

5.*Синтаксис.*Һүҙҙәрҙе,һүҙбәйләнештәрҙе,һөйләмдәрҙе таныу,уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары.Һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатыу.Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.Һөйләү маҡсатына ҡарап,һөйләмде өс төргә бүлеү:хәбәр,һорау,өндәү.Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре.Һөйләмдең тиң киҫәктәре.Һөйләмгә синтаксик анализ.

6.*Лексика.*Һүҙҙәрҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе.Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Синонимдар,антонимдар,омонимдар.Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен аңлатыу,улар менән һөйләмдәр төҙөү.

7.*Телмәр һәм уның төрҙәре.*Һөйләү телмәре. Диалог.Әңгәмәсе менән диалог ҡороу. Аралашыу оҫталығы(логик эҙмә-эҙлелек һәм тасуирлыҡ).Эске телмәр.

Хикәйә.Әкиәт.Шиғыр.Тексты логик яҡтан тамамланған өлөштәргә бүлеү. Уларға исем ҡушыу(план).Абзац.Ҡыҙыл юл.Бәләкәй күләмле хикәйәләр(текст) ижад итеү.Текскҡа ҡарата ҡыҫҡа баһалама яҙыу.Әкиәт.Әкиәт ижад итеү.Шиғыр төҙөлөшөн өйрәнеү.Шиғырҙы күсереп яҙыу үҙенсәлектәре.

8.*Телмәр үҫтереү.*Телмәр мәҙәниәте.Темаға ярашлы тәбиғәт күренештәре,тормош-көнкүреш,ҡыҙыҡлы хәлдәр тураһында ҡыҫҡа текст төҙөү.

Текстҡа план төҙөү.Текстың өлөштәре һәм һөйләмдәр араһында мәғәнәүи бәйләнеш булдырыу.Текстың темаһы,төҙөлөшө(инеш,төп өлөш,йомғаҡлау).

Әҙер йәки коллектив төҙөлгән план буйынса текст төҙөү.Тәҡдим ителгән текст буйынса изложение яҙыу.Хикәйә һәм инша яҙыу.Әкиәт төҙөү.

## Планлаштырылған һөҙөмтәләр

Башҡорт телен өйрәнеү һөҙөмтәһенең бер йүнәлеше булып башланғыс класс уҡыусылары тарафынан рухи ҡиммәттәрҙең системаһын төшөнөү һам үҙләштереү тора. Башланғыс кластарҙа әсә теле дәрестәрендә түбәндәге рухи ҡиммәттәргә иғтибар бүлеү мотлаҡ.

Шәхси сифаттарҙы үҫтерергә:

-башҡорт теленең матурлығын һәм тасуирилығын тоя белеү,телде ихтирам итеү;

- үҙ телеңде камиллаштырырға ынтылыу;

-тыуған ереңә,халҡыңа һәм мәҙәниәтеңә ихтирамлы булыу;

-белем алыу менән ҡыҙыҡһыныу,уҡыуға ихтыяжлы булыу.

Предмет буйынса белем алырға:

- һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса төркөмләргә. Тейешле һорауын ҡуйырға. . Предмет атамаһы,хәрәкәтен,билдәһен белдереүсе һәм ярҙамсы һүҙҙәр тураһында һөйләргә һәм яҙма телмәрҙә урынлы ҡулланырға;

-өндәр һәм хәрефтәрҙе,ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы,яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы айырыу,фонетик анализ яһау;

-ҡушма һүҙҙәрҙе,ҡушма һүҙҙәрҙә ҡалын һәм нәҙек айырыу билдәләрен билдәләү,ялғауҙарҙы,нәҙеклек билдәһенә бөткән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙы,ҡуш тартынҡыларҙы,тамыр һүҙҙәрҙәге о-ө,ы-е хәрефтәренең ялғау ҡушҡанда ла һаҡланыу һәм яҙылмау осраҡтарын белеү һәм дөрөҫ яҙыу;

-исемдәрҙе,ҡылымдарҙы,сифаттарҙы,ярҙамсы һүҙҙәрҙе таныу һәм программа кимәлендә морфологик анализ эшләү;

-һүҙҙәрҙе,һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе айырыу, һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатыу;

-һөйләм маҡсатына ҡарап,һөйләмде 3 төргә бүлеү һәм тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу;

-һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен белеү;

- тиң киҫәктәрен күреү теркәүестәр булмаған осраҡта тыныш билдәләрен ҡуйыу;

-һүҙҙәрҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһен айыра белеү,тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе,синоним,антоним,омонимдарҙы белеү һәм телмәрҙә ҡулланыу;

-нығынған һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен аңлатыу,уларҙы телмәрҙә ҡулланыу;

-дəреслектəн нəфис əҙəбиəтте уҡыу(хикəйə,əкиəт,шиғыр).Тексты логик яҡтан тамамлаған өлөштəргə бүлеү.Уларға исем ҡушыу(план төҙөү);

-тəҡдим ителгəн текст буйынса ентекле изложение яҙыу.

**Универсаль уҡыу эш төрҙəрен үҙлəштерергə:**

- үҙ аллы уҡыу, мəғлүмəтте эҙлəү күнекмəлəре булдырырға; тикшеренеү-эҙлəнеү эшен планлаштырырға;, парлап, төркөмлəп, команда менəн эшлəргə;

- алған мəғлүмəтте ҡағыҙға теркəргə;

-уҡыу материалын тикшерергə, анализларға, һығымта яһарға;

- мəҙəниле аралашыу этикетына өйрəнергə: əңгəмəсене тыңларға, хупларға,үҙ фекереңде ҡыҫҡа һəм аңлайышлы итеп еткерергə, уны яҡлай белергə.

Изгелек ҡиммəте – үҙеңде һанап бөтөргөһөҙ бəйлəнештəрҙəн торған донъяның бер өлөшө итеп тойоу, кешелəрҙең тел ярҙамында бер- береһе менəн бəйлəнеше əҙəплелекте таныуға нигеҙлəнеүен аңлата.

Аралашыу ҡиммəте – аралашыуҙы йəмғиəттең, мəҙəниəттең əһəмиəтле бер өлөшө итеп таныу.

Матурлыҡ ҡиммəте – башҡорт теленең матур, яғымлы халыҡ байлығы булыуын аңлап үҙлəштереү.

Хеҙмəт һəм ижад ҡиммəте – хеҙмəт кешелек йəшəйешенең төп шарты, халəте булыуын ҡабул итеү. Хеҙмəткə һөйөү тəрбиəлəүҙə уҡыу эшмəкəрлегенең əһəмиəте ҙур.Уҡыу шмəкəрлеге барышында ойошҡанлыҡҡа, үҙаллылыҡҡа, яуаплылыҡҡа, хеҙмəттеһөйөргə өйрəнергə мөмкин икəнлеген аңлау.

Илһөйəрлек ҡиммəте – үҙ теленде һəм халҡыңды хөрмəт итеү, халыҡтың йолаларын, ғөрөф- хəҙəттəрен өйрəнеү, ғаилə, ил алдында бəлəкəйҙəн үк яуаплы булыуҙы тойоп үҫеү.

Кешелеклелек ҡиммəте – үҙең һəм башҡалар өсөн яуаплылыҡ тойоп үҫеү, кешенең йəшəү урыны булған тəбиғəтте һаҡлау кəрəклеген аңлау.

**Метапредмет** кимəле.

Ойоштороу эшмəкəрлеге:

- уҡытыусы ярҙамында эшмəкəрлек маҡсатын билдəлəү;
- дəрестə эш барышын һөйлəп барыу;
- дəреслек материалы менəн эшлəү барышында уйҙы, фаразды əйтеү;
- уҡытыусы тəҡдим иткəн план буйынса эшлəү;
- коллектив төҙөлгəн план буйынса эшлəү;

Танып белеү эшмəкəрлеге:

- дəреслектең, матур яҙыу өлгөлəренең айышына төшөнөү;
- дəреслектəн, текстан, иллюстрацияларҙан һорауға яуап табыу;
- бергəлəп йəки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү;
- ҙур булмаған тексттың йөкмəткеһен һөйлəү.

Аралашыу эшмəкəрлеге:

- фекереңде телдəн формалаштырыу;
- кеше телмəрен тыңлау һəм аңлау;

- тыңлай белеүҙең уңышлы аралашыуға шарт булыуын үҙләштереү;
- тексты тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен һөйләү;
- уҡытыусы һәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү тураһында килешеү.

**Предмет үҙләштереү кимәле.**

- тексты һөйләмдәр теҙмәһенә айыра белеү;
- бөтөн һүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ уҡыу;
- тексты ентекле һөйләй белеү;
- хикәйә төҙөү;
- һүҙҙең өндәрен атау, ижеккә бүлеү, өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләү, дөрөҫ баҫым ҡуйыу, хәреф- өн анализы яһау;
- һөйләмде, кешенең исемен һәм фамилияһын баш хәреф менән яҙыу;
- һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен яҙыу;
- баҫма тексты күсереп яҙыу, һүҙҙарҙе ,ҙур булмаған һөйләмдәрҙе диктант итеп яҙыу;
- тамырҙаш һүҙҙәрҙең тамырын табыу.

Башҡорт теленә өйрәтеү программаһының төп принциптары.

1. Һәр баланың шәхси үҙсәнлектәрен иҫәпкә алыу.
Икенсе быуын хөкүмәт стандарттарының талаптарына ярашлы шәхси предмет һәм метапредмет өлкәһендәге үҫеште төрлө кимәлдәге эштәр менән тәьмин итеү бурысы тора.
2. Фәнни–теоретик белем биреү.
Телде өйрәнеүҙе төп фәнни-теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштереүгә нигеҙләнеп ҡороу.
3. Һәр баланы төрлө яҡлап өҙлөкһөҙ үҫтереү.
4. Башҡорт телен заманса аралашыу ҡоралы итеп ҡулланыу.
5. Баланың психик һәм физик һаулығын һаҡлау.
Дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын хөкүмәт стандарттары уҡыусылар һәм

**Уҡытыусылар алдына түбәндәге талаптарҙы һәм бурыстарҙы ҡуя :**

1). Уҡыусыны уҡыу,белем алыу эшмәкәрлегенә өйрәтеү, фекерләү, аҡыл-аң ҡеүәһен үҫтереү; үҙен уратып алған һәр нәмәгә үҙ баһаһы булған шәхес итеп үҫтереү.
Ғалимдар раҫлауынса, белем алыуға ҡыҙыҡһыныу уятыусы һәм этәргес көс булып дәрестә проблемалы уҡытыу тора.
Уҡыусы дәрестә тыңлаусы ғына түгел, ә фекерләүсе,эҙләүсе,белем алыусы. Шуға күрә
«уҡытыусы - уҡыусы»һәм«уҡыусы - уҡыусы»мөнәсәбәттәрен дөрөҫ ойоштороу кәрәк.
2). Башҡорт балаларының күбе уҡырға үҙ телендә һөйләшеп килә, үҙ телендә фекер йөрөтә. Уның үҫешен тотҡарламау өсөн уны үҙ телендә уҡытыу мөһим.

3). Телде заманса аралашыу ҡоралы итеп күҙаллап өйрәтеү.
Бәләкәй бала һөйләшеүгә әүәҫ.Бер партала ултырған ике уҡыусы үҙ-ара һөйләшергә, фекер йөрөтөргә тейеш.Һорай белеү,йәғни үҙең белмәгәнде асыҡларга баҙнат итеү юғары баһалана.
4). Башланғыс мәктәптә телде уҡытыуҙы, уҡытыу-тәрбиә эшен халҡыбыҙҙың бай мираҫына ҡороу төп шарт булып тора.Шуға ла дәреслектәрҙә халыҡ ижады ҡомартҡыларын ҡулланыуға ҙур иғтибар бүленә.
5). Башланғыс мәктәптә уҡытылған башҡа фәндәрҙе (рус теле һәм уҡыу,математика,һынлы сәнғәт,хеҙмәтһ.б.) әсә теле менән тығыҙ бәйләнештә уҡытыу мөһим. Һөҙөмтәлә башланғыс мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эше дөйөм бер система булып тора.
3-сө класта«Башҡорт теле»н өйрәнеү курсы тел ғилемен,телмәр эшмәкәрлеген артабан дауам итеү,туған тел аша донъяны танып белеү һәм социаль өлкәлә аң-белем алыу, мәҙәниәтле шәхес итеп тәрбиәләү маҡсатын ҡуя. Был маҡсаттарға ирешеү өсөн түбәндәге мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк :
- лексика, фонетика, грамматика, синтаксис, орфография, пунктуация, телмәр үҫтереү өлкәһендәге белемдәрҙе, оҫталыҡты артабан киңәйтеү, тәрәнәйтеү;
-коммуникатив компетентлыҡ: грамоталы яҙыу һәм уҡыу, диалогта ҡатнашыу, монолог текстар төҙөү һәм һөйләү;
-туған телгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, уны теләп өйрәнеү.

Башҡорт теле.
Тематик планлаштырыу.
3 класс, аҙнаһына 2 сәғәт

| Темалар | сәғ.һаны |
|---|---|
| Һаумы,мәктәп!Байрам менән,хөрмәтле өсөнсөләр! | 1 |
| 2-се класта үтелгәндәрҙе актуалләштереү | 5 |
| Әҙәби әҫәр,китап исемдәре | 4 |
| Башҡорт теленең төп законы | 7 |
| Сит телдән үҙләштерелгән һүҙҙәр | 13 |
| Һүҙ нисек яһала? Һүҙьяһалыш | 10 |
| Ҡушма һүҙҙәр.Уларҙың яһалышы | 9 |
| Һөйләм.Баш һәм эйәрсән киҫәктәр | 6 |
| Телмәр төрҙәре.Һөйләү телмәре.Монолог.Диалог | 2 |
| Текст. Яҙма телмәр | 11 |

Календарь планлаштырыу

| № | Дәрес темаһы | Дәрес һаны | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План | факт | |
| 1. | Һаумы,мәктәп!Байрам менән,хөрмәтле өсөнсөләр! | 1 | 4.09 | | |
| 2. | Ниҙәр иҫемдә?Нимәләрҙе онотҡанмын? | 1 | 5.09 | | |
| 3. | Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре. Һүҙлек диктанты. | 1 | 11.09 | | |
| 4. | Һөйләмдә тыныш билдәләре | 1 | 12.09 | | |
| 5. | Кешенең исем-фамилиялары | 1 | 18.09 | | |
| 6. | Кешенең исем-фамилиялары. Хайуан ҡушаматтары | 1 | 19.09 | | |
| 7. | Әҙәби әҫәр,китап исемдәре | 1 | 25.09 | | |
| 8. | Гәзит-журналдар,телерадио тапшырыуҙары исемдәре | 1 | 26.09 | | |
| 9. | Ер-һыу атамалары | 1 | 2.10 | | |
| 10. | Тикшереү эше. Контроль диктант "Көҙ". | 1 | 3.10 | | |
| 11. | Башҡорт теленең төп законы. | 1 | 9.10 | | |
| 12. | Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар. | 1 | 10.10 | | |
| 13. | Телмәр үҫтереү "Таң ҡалдырғыс көҙгө күренештәр". | 1 | 16.10 | | |
| 14. | Инша "Көҙ көнө". | 1 | 17.10 | | |
| 15. | Тартынҡы өндәр. Парлы һәм парһыҙ, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар | 1 | 23.10 | | |
| 16. | Танау тартынҡы өндәре. | 1 | 24.10 | | |
| 17. | [к]-[г],[ҡ]-[ғ],[п]-[б] өндәренең сиратлашыуы | 1 | 6.11 | | |
| 18. | Сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә нәҙек һәм ҡалын ижектәрҙең ҡатнаш килеүе | 1 | 7.11 | | |
| 19. | Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәргә ялғау ҡушыу үҙенсәлектәре | 1 | 13.11 | | |
| 20. | Сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙар | 1 | 14.11 | | |
| 21. | Тикшереү эше. Диктант. | 1 | 20.11 | | |
| 22. | Ё һәм ц,ч,щ хәрефле һүҙҙәр | 1 | 21.11 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 23. | Ике өндө белдереүсе хәрефтәр | 1 | 27.11 | | |
| 24. | Е,ю,я хәрефле һүҙҙәр | 1 | 28.11 | | |
| 25. | Тикшереү эше. Аңлатмалы диктант. | 1 | 4.12 | | |
| 26. | Һүҙ нисек яһала? | 1 | 5.12 | | |
| 27. | Һүҙьяһалыш | 1 | 11.12 | | |
| 28. | Ялғау төрҙәре | 1 | 12.12 | | |
| 29. | Һүҙ яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар | 1 | 18.12 | | |
| 30. | Тикшереү эше. Күсереп яҙыу. | 1 | 19.12 | | |
| 31. | Әйтелгәнсә яҙылмай торған һүҙҙәр | 1 | 25.12 | | |
| 32. | Тамырында ла,ялғауында ла о!<br>Тамырында ла,ялғауында ла ө! | 1 | 26.12 | | |
| 33. | Тикшереү эше. Контроль диктант. | 1 | 15.01 | | |
| 34. | Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәр. Һайланма диктант. | 1 | 16.01 | | |
| 35. | Ҡушма һүҙҙәр.Уларҙың яһалышы. | 1 | 22.01 | | |
| 36. | Ҡушма һүҙҙәрҙә ъ һәм ь билдәләре ҡасан яҙыла? | 1 | 23.01 | | |
| 37. | Һыҙыҡса аша яҙылыусы ҡушма һүҙҙәр | 1 | 29.01 | | |
| 38. | Ҡушма һүҙҙәрҙең яҙылышы | 1 | 30.01 | | |
| 39. | Тикшереү эше. Тест. Һүҙлек диктанты. | 1 | 5.02 | | |
| 40. | Һөйләм.Баш һәм эйәрсән киҫәктәр | 1 | 6.02 | | |
| 41. | Һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнеше | 1 | 12.02 | | |
| 42. | Текст. | 1 | 13.02 | | |
| 43. | Һүҙбәйләнештәр.Күсмә мәғәнәле һүҙбәйләнештәр | 1 | 19.02 | | |
| 44. | Тикшереү эше. Диктант. | 1 | 20.02 | | |
| 45. | Телмәр төрҙәре.Һөйләү телмәре.Монолог | 1 | 26.02 | | |
| 46. | Һөйләү телмәре.Монолог | 1 | 27.02 | | |
| 47. | Һөйләү телмәре.Диалог | 1 | 5.03 | | |
| 48. | Яҙма телмәр.Текст | 1 | 6.03 | | |
| 49. | Яҙма телмәр.Инша,изложение. | 1 | 12.03 | | |
| 50. | Инша. Сыйырсыҡтар килде. | 1 | 13.03 | | |
| 51. | Яҙма телмәр.Хат,көндәлек | 1 | 19.03 | | |
| 52. | Яҙма телмәр.Шиғыр.Әкиәт.Хикәйә. | 1 | 20.03 | | |
| 53. | Изложение. | 1 | 26.03 | | |
| 54. | Шиғыр нисек яҙыла?<br>Күсереп яҙыу. Шиғыр. | 1 | 27.03 | | |
| 55. | Яҙма телмәр.Әкиәт | 1 | 9.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 56. | Әкиәт ижад итеү | 1 | 10.04 | | |
| 57. | Әкиәт,хикәйә ижад итеү | 1 | 16.04 | | |
| 58. | Яҙма телмәр.Хикәйә | 1 | 17.04 | | |
| 59. | Хикәйә ижад итеү. | 1 | 23.04 | | |
| 60. | Тикшереү эше йәки әкиәт, хикәйә ижад итеү. | 1 | 24.04 | | |
| 61. | Бәләкәй әҙәби жанр төрҙәре.Тапҡыр,тәрән мәғәнәле һүҙҙәр. | 1 | 30.04 | | |
| 62. | Тапҡыр,тәрән мәғәнәле һүҙҙәр | 1 | 1.05 | | |
| 63. | Өләсәйемдең,олатайымдың әйткәне | 1 | 7.05 | | |
| 64. | Бәләкәй күләмле жанр  төрҙәре.<br>Изложение. | 1<br>1 | 8.05 | | |
| 65. | Ололар һүҙенә ҡолаҡ һал,унан үҙеңә аҡыл ал! | 1 | 14.05 | | |
| 66. | Тикшереү эше.   Контроль диктант. | 1 | 15.05 | | |
| 67. | Һаумы,йәмле йәй!Ура!Йәйге каникулдар етә! | 1 | 21.05 | | |
| 68. | Тикшереү эше. Һүҙлек диктанты.<br>Йомғаҡлау. | 1 | 22.05 | | |